***Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,***
***академик***

# Төплө зиһен, ҙур рух емештәре



*Ғиниәтулла Сафиулла улы Ҡунафин*

Башҡорт нәфис әҙәбиәте һәм әҙәбиәт ғилеме донъяһында лирик, эпик, һирәкләп булһа ла драма әҫәрҙәре яҙырға тотоноп та, аҡрынлап фән донъяһына күсеүселәр ҙә, һәм, киреһенсә, ғилми донъянан ваз кисеп, әҙәбиәт иленә ҡарай юл алғандар ҙа бар. Фәнгә тоғролоҡ һаҡлап, шул йүнәлештә ныҡышмалы рәүештә баш баҫып, төплө эшләгәндәре лә осрай. Күп түгел улар. Һанай башлаһаң, ҡул бармаҡтары ла етә. Ана шундай ғалим-филологтар араһында алғы сафта барыусылар рәтенә мин филология фәндәре докторы, профессор Ғиниәтулла Сафиулла улы Ҡунафинды ла индерер инем.

Ғ.С.Ҡунафиндың ҙур ғалим, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре булып формалашыуы беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа барҙы. БДУ-ла уҡып йөрөгән сағында уҡ ваҡытлы матбуғат биттәрендә һирәкләп булһа ла рецензиялар, мәҡәләләр менән сығыш яһауы, ҡайһы бер уҡытыусыларының, айырыуса заманыбыҙҙың күренекле телсе-методисы, “Әлифба” авторы, Ушинский исемендәге премия лауреаты, доцент Әбдерәхмән Әбдерәхим улы Ғәлләмовтың уны маҡтап телгә алыуҙары иҫтә ҡалған. Хөрмәтле ғалим-педагог Ғ.Ҡунафин уҡыған төркөмдөң кураторы булған икән. Уның һәм тағы ла бер-ике ғалим-педагогтың БДУ-ны ҡыҙыл диплом менән тамамлаған йәш белгесте аспирантураға тәҡдим итеүҙәре бөгөнгөләй хәтеремдә. Ә ул заманда аспирантураға урындар әҙ бүленә һәм ауырлыҡ менән яулап алына, шуға күрә был урынға дәғүә итеүселәр күбәйеп китә ине. Ул йылды ла шулай булды. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты етәкселеге менән һөйләшеп, 4—5 дәғүәсенең һәр ҡайһыһы менән әңгәмәләшеү, яҡындан танышыу хаҡында килештек. Үҙен бик баҫалҡы тотҡан, етди ҡарашлы, һомғол буйлы егет менән һөйләшәбеҙ, һорауҙар бирәбеҙ. Ғафури районы Сәйетбаба ауылында күп балалы колхозсы-крәҫтиән ғаиләһендә тыуып үҫкән, шунда урта мәктәпте тамамлаған. Уҡыусы сағында шиғыр-

ҙарын, мәҡәләләрен район гәзитендә баҫтырғылап торған, шуға ла комсомолдың район комитеты уны район гәзитенә эшкә тәҡдим иткән, хәрби хеҙмәткә алынғансы шунда эшләп йөрөгән, аҙаҡ БДУ-ға уҡырға ингән. Мәктәптә лә, армияла ла, университетта ла ул йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан: пионер, комсомол, профсоюз ойошмаларына етәкселек иткән. Хәрби хеҙмәтенең өсөнсө йылында уға хатта рота старшинаһы вазифаһын башҡарыуҙы ышанып тапшырғандар.

Беҙҙең иғтибарҙы айырыуса йәлеп итә төшкәне шул булды: юғары уҡыу йорттарында, шул иҫәптән БДУ-ла ла, башҡорттар йәш яҙмалы халыҡ, уның революцияға тиклем яҙма культураһы булмаған тигән ялған идеология, әҙәби мираҫҡа нигилистик ҡараш шауҡымында рухи мираҫыбыҙҙың тәрән тамырҙарын барлап өйрәнеү түбән кимәлдә булған бер саҡта, студент Ҡунафин Мәскәү китапханаларында һәм архивтарында эҙләнеп, ҡомандарҙың (ҡыпсаҡтарҙың) көнбайыш илдәре менән иҡтисади-сәйәси һәм мәҙәни бәйләнештәре ерлегендә XIII быуат башында тыуған “Кодекс куманикус” (“Ҡоман мәжмүғәһе”) тигән ҡомарҡыны өйрәнергә йөрьәт иткән. Унда урын алған һүҙ сәнғәте өлгөләрен төрлө яҡлап анализлап, уларҙың башҡорт фольклоры, эстетик фекере менән тығыҙ бәйләнештә булыуын нигеҙләп, диплом эше яҙған. Был үҙе бер ҡыйыулыҡ, егеттең тырышлығы, ғилемгә барымы барлығы күрһәткесе ине.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты базаһында башҡорт әҙәбиәтенең күп томлыҡ тарихын яҙыу идеяһын тормошҡа ашырыу мәсьәләһе ныҡлап күтәрелгән бер мәлдә, быңдай йәш белгесте аспирантураға алырға, ғилми етәксеһе булырға кинәнеп ризалаштым. Уға өмөттәр бағлап яңылышмағанмын. Аспирантым һәләтле, тырыш, уңған булып сыҡты: Өфө, Стәрлетамаҡ, Ҡазан, Ырымбур, Мәскәү, Ленинград ҡалаларындағы архивтарҙа, китапханаларҙа баш ҡалҡытмай эҙләнде, төрлө райондарҙа, төбәктәрҙә уҙғарылған археографик экспедицияларҙа ҡатнашты, материалдар тупланы, текстологик эштәр алып барҙы, мәҡәләләр яҙҙы. Тырышлыҡ бушҡа китмәне. Арҙаҡлы мәғрифәтсе-ғалим, әҙип һәм йәмәғәт эшмәкәре Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тормошо һәм ижады хаҡындағы диссертацияһын аспирантурала уҡыуға бирелгән ваҡыттан алда яҙып бөтөрҙө. Был 1976 йылдың көҙө ине. Әле лә хәтерләйем: хеҙмәтте Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының әҙәбиәт һәм фольклор бүлеге ултырышында тикшергәндә, Әхнәф Харисов, Ким Әхмәтйәнов, Ғилемдар Рамазанов, Әнүр Вахитов, Вафа Әхмәҙиев кеүек тәжрибәле ғалимдар уға юғары баһа бирҙе. Әҙәби мираҫыбыҙҙы өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән, революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте буйынса беренсе булып докторлыҡ диссертацияһы яҡлаған, фән донъяһында киң танылыу алған Әхнәф Харисовтың шәкертем хаҡында: “Сафыбыҙ фәнни тикшеренеүҙәргә маһир, киләсәге өмөтлө йәш белгес менән тулыланыуға шатмын. Әҙәбиәт ғилеме донъяһына төплө әҙерлекле ғалим килде. Уның фәнебеҙҙе үҫтереүгә ҙур өлөш индерәсәгенә ышанысым ҙур”, — тип баһа биреүен ишетеү, әлбиттә, ҡыуаныслы ине.

Әйтергә кәрәк, шатлығы менән бергә борсолоуҙар ҙа булып алды ул саҡта. Шәкертем диссертацияһын яҡларға тип йүгереп йөрөгән бер мәлдә, көтмәгәндә етди ҡаршылыҡ килеп сыҡты. Бөтә СССР-ҙа “берҙәм

совет халҡы” тигән ҡәүемдең барлыҡҡа килеүе хаҡында лаф орған, шул идея-ҡарашты һүндермәҫ өсөн юғарынан төрлө саралар күрелгән, күрһәтмәләр бирелгән саҡ ине шул. Ғилми дәрәжәләр биреү буйынса СССР-ҙың Юғары аттестация комиссияһынан да шундай күрһәтмә хаты килеп төштө. Унда бөтә милли республикаларҙа ла диссертацияларҙың туған телдә түгел, ә фәҡәт рус телендә, яңы талап һәм ҡағиҙәләр нигеҙендә башҡарылырға, авторефераттарҙың структур-композицион йәһәттән бөтөнләй башҡаса яҙылырға тейешлеге тураһында хәбәр ителә. Ҡулға алып ҡарарлыҡ, өйрәнерлек бер ниндәй өлгө булмауына ҡарамаҫтан, аспирантым килеп тыуған ҡаршылыҡты 3—4 ай эсендә еңеп сыҡты. Ул диссертацияһын урыҫ теленә тәржемә итеп, яңы талаптарға ярашлы үҙгәртеп ҡорҙо, авторефератын яңы структураға яраштырып, өр-яңынан яҙҙы һәм диссертация советы алдында уңышлы һынау тотто. Шуны ла әйтергә кәрәк, уның был хеҙмәттәре заманында аспирант һәм докторант филологтарға үҙе бер өлгө булып китте. Уларҙың был фактты бөгөн дә онотмай иҫкә алыуҙарын ишетергә тура килгәне бар.

Шулай Ғиниәт Ҡунафин башҡорт әҙәбиәт ғилеменең ныҡлы бер таянысына әүерелә башлай. Ул алты томлыҡ башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыуҙа әүҙем ҡатнаша, бигерәк тә XIX—XX быуат башындағы рухи байлығыбыҙҙы барлап өйрәнеү йүнәлешендә дәртләнеп эшләй. Уның тарафынан был фундаменталь хеҙмәткә яҙылған монографик бүлектәрҙән киң ҡатлам уҡыусылар XIX быуаттың беренсе яртыһында Башҡортостанда мәҙәниәт һәм әҙәбиәттең торошо, үҫеш тенденциялары менән танышты. Ш.Зәки, Ә.Ҡарғалы, Һ.Сәлихов, М.Ҡотош-Ҡыпсаҡи, Б.Ҡотдосов, И.Мырҙаҡаев, Х.Жданов, С.Күкләшев, М.Иванов, М.Биксурин, М.Өмөтбаев, Р.Фәхретдинов кеүек шағирҙарҙың, сәсәндәрҙең, ғалимяҙыусыларҙың ижадтары хаҡында төплө мәғлүмәттәр алды.

Шәкертем Башҡорт дәүләт университетына уҡытыусылыҡ эшенә күскәс тә, фәнни эҙләнеүҙәрен һүлпәнәйтмәне. Бары уның саф академик характерҙағы тәбиғәтенә ғилми-методик йүнәлештәге эҙләнеүҙәр өҫтәлә төштө. Ғалим-педагог республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттары тарихында башлап студенттар өсөн башҡорт әҙәбиәтенең боронғо дәүерҙән алып 1917 йылға тиклемге ике киҫәктән торған тулайым, системалы программаһын төҙөнө, бер-бер артлы “XIX быуаттың беренсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәте” (1988), “XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәте” (1992), “Культура Башкортостана и башкирская литература в XIX веке” (1992) китаптарын баҫтырып сығарҙы. Ул үҙенең уй-фекерҙәре, фәнни күҙәтеүҙәре менән төбәк-аранан алып халыҡ-ара кимәлдәге ғилми конференцияларҙа һәм симпозиумдарҙа сығыштар яһарға, тиҫтәләгән мәҡәләләрен ғилми йыйынтыҡтарҙа һәм журналдарҙа баҫтырырға ла ваҡыт таба. Миңә, әллә ни йыш булмаһа ла, уның менән бергә шул конференцияларҙа һәм симпозиумдарҙа ҡатнашырға тура килгәне бар. Мәҫәлән, шуларҙың иң һуңғыларының береһе — Екатеринбургта 2005 йылдың октябрендә уҙғарылған Бөтә Рәсәй фәнни конференцияһы хәтерҙә ярайһы уйылып ҡалған. Ул Урал төбәгендә йәшәүсе халыҡтарҙың биш томлыҡ әҙәбиәт тарихын яҙыу мәсьәләһенә арналғайны. Минең пленар ултырышта яһаған сығышым

менән бер рәттән Ғ.Ҡунафин, М.Иҙелбаев, М.Нәҙерғоловтарҙың докладтары унда ҙур резонанс уятты. Конференцияның һуңғы көнөндә ойошторолған “түңәрәк өҫтәл” артында һөйләшеүҙә шәкертемдең минең менән бергә башҡорт әҙәбиәтенең Урал регионындағы ниндәйҙер “килмешәк”, “ҡушымта” һүҙ сәнғәте булмауын, ә ысын мәғәнәһендә иң боронғо, тарихи ерлекле, “аҫаба” әҙәбиәт булыуын иҫбатлап, уның бәҫен яҡлап, ике-өс тапҡыр күтәрелеп төплө сығыш яһауы күптәрҙе уйланырға, дискуссия ағымын конструктив йүнәлешкә бороп ебәрергә, фекерҙәребеҙҙе иҫәпкә алырға булышлыҡ итте. Әгәр ҙә Урал халыҡтарының биш томлыҡ әҙәбиәте тарихын яҙырға насип була ҡалһа, башҡорт әҙәбиәте унда лайыҡлы яҡтыртыу табасағына хәҙер иманым камил.

Бөгөнгө көндә профессор Ғ.С.Ҡунафин 300-ҙән артыҡ ғилми хеҙмәттәрҙең, шул иҫәптән өс тиҫтәгә яҡын монографияларҙың, дәреслектәрҙең һәм уҡыу әсбаптарының авторы. Шәкертемдең эштәренең күбеһен ҡарап, уҡып барғанлыҡтан, бөтә яуаплылыҡ менән әйтә алам: төплө зиһен, ҙур рух емештәре улар. Бына уның һуңғы йылдарҙа донъя күргән монографияларының береһе — “Үткәндең шиғри ауазы” (“Поэтическое эхо прошлого”, 2004). Авторға уй-фекерҙәрҙе биреүҙә һибелеп китеү, эҙмә-эҙлелекте юғалтыу, тегенән-бынан алып ҡорама яһау “стиле” ят. Әйтер һәр һүҙе, һәр фекере уйланылған, күҙәтеүҙәре дәлилләнгән. Был инде фәнни эштәр өсөн бик мөһим системалылыҡ, академизм күрһәткесе.

Әле һүҙ барған һәм унан алда донъя күргән “И песней, и сатирой...” (1999), “Башкирская поэзия XIX — начала XX веков” (2002), “Башкирская нарративная поэзия XIX — начала XX веков” (2003) монографияларында ғалим башҡорт әҙәбиәт ғилемендә бығаса яңғырамаған өр-яңы фекерҙәр, концепциялар менән сыға, уларҙы бай фактик материалдар ерлегендә яһалған төплө анализдары һәм күҙәтеүҙәре менән ышандырырлыҡ дәлилләй. Ул революцияға тиклемге дәүер әҙәбиәтебеҙҙең лирик төргә ҡараған жанрҙарын системалы классификациялауҙың яңы принциптарын тәҡдим итә. Алғы планға ғилми әҫәрҙәрҙең йөкмәтке һәм форма күрһәткестәрен генә түгел, ә тәғәйенләнештәрен, функцияларын да сығара. Поэтик жанрҙарҙы ул төп дүрт төркөмгә бүлеп ҡарауҙы тәҡдим итә: йыр поэзияһына, манифестацион-публицистик, медитатив һәм нарратив шиғриәттәргә ҡараған жанрҙар төркөмдәре. Тәҡдим иткән төркөмләү принциптарына ярашлы, автор үҙ китаптарында әҙәбиәттең лирик төрө типтарының һәр ҡайһыһына ентекле һәм төплө характеристика бирә, уларҙың тәбиғәтен, үҙҙәренә генә хас характерлы һыҙаттарын асып һала, уларға ҡараған жанрҙар системаһының әлегәсә бер кем тарафынан өйрәнелмәгән яҡтарын, һыҙат-үҙенсәлектәрен аса. Быға тикшереү өсөн бай әҙәби материалдың йәлеп ителеүе, әлегәсә билдәле булмаған байтаҡ боронғо яҙма сығанаҡтарҙың фәнни әйләнешкә индерелеүе ныҡ булышлыҡ итә.

Профессор Ғ.С.Ҡунафин шиғриәттең йыр тибына ҡараған йыр-баллада, йыр-мәҙхиә, йыр-агитка, йыр-сада (оран), романс, гимн, марш, бәйет, мөнәжәт; манифестацион-публицистик характерҙағы шиғриәттең хитап, мәктүб, васыятнамә, эпиграмма, пародия, мадригал, сатирик шиғыр, парафраз; нарратив поэзияның поэма, баллада, мәҫәл,

тәмҫил кеүек жанрҙарын һәм формаларын төрлө яҡлап өйрәнгәндә, уларҙың генезисын, формалашыу юлдарын асыҡлау маҡсатында йыш ҡына боронғо һәм урта быуаттар һүҙ сәнғәтенә экскурс яһап ала, башҡорт-көнсығыш, башҡорт-көнбайыш, айырыуса башҡорт-урыҫ әҙәби бәйләнештәре мәсьәләһенә ҙур иғтибар бүлә, киң әҙәби фонда сағыштырма-типологик тикшеренеүҙәр үткәрә. Ғалим фольклор һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте (йырауҙар һәм сәсәндәр ижады) ҡомарҡыларына ла йыш мөрәжәғәт итә. Был аңлашыла ла. Ни генә тимә, әҙәбиәттең юл башы фольклорҙа бит.

Ғөмүмән, Ғ.С.Ҡунафиндың һәр монографияһы асыш-табыштарға бай булыуы менән иғтибарҙы үҙенә тарта. Был йәһәттән уның һуңғы йылдарҙа донъя күргән китаптары айырыуса күңелде биләй. М.Ғәйнуллин, Т.Килмөхәмәтов, Ф.Күзбәков, М.Нәҙерғолов кеүек тәжрибәле әҙәбиәт белгестәренең уларҙы бер тауыштан “асыштар, яңы ҡараштар йыйылмаһы” тип баһалауҙары менән килешмәү мөмкин түгел.

Хәйер, Ғ.С.Ҡунафиндың тәүге монографиялары ла башҡорт әҙәбиәт ғилеменә ниндәй ҙә булһа яңылыҡ алып килмәй ҡалманы. 1981 йылда Мәскәүҙә ул саҡта СССР-ҙың төп академик нәшриәте “Наука”ла коллегаһы Ә.Вилданов менән берлектә сығарған “XIX быуат башҡорт мәғрифәтсе-демократтары” (“Башкирские просветители-демократы XIX века”) хеҙмәте күп милләтле илдә ҙур популярлыҡ яуланы, заманы өсөн бөтә башҡорт әҙәбиәт ғилеменең оло ҡаҙанышы булды. Уның аша СССР-ҙа йәшәүсе йөҙәрләгән милләт вәкилдәре урыҫ телендә тәү башлап башҡорттарҙың XIX быуаттағы рухи донъяһы, энциклопедик ҡоласлы, фәлсәфәүи-эстетик ҡеүәле арҙаҡлы әҙиптәре тураһында системалы мәғлүмәт алды. Был монография әлегә тиклем Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт әҙәбиәте, ижтимағи-эстетик фекере буйынса Мәскәүҙә донъя күргән, М.Нәҙерғоловтың бик дөрөҫ әйтеүенсә, “милли әҙәбиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ тарихының мөһим һәм сағыу бер осоро менән тотош ил халҡын таныштырған, рухи ынйыларыбыҙҙы киң даирәгә сығарған” берҙән-бер хеҙмәт булып тора.

Ғалимдың артабан рус телендә донъя күргән “XIX—XX быуат башындағы башҡорт сатирик поэзияһы” (1996), “XIX—XX быуат башындағы башҡорт әҙәби йыр поэзияһы” (1997) монографиялары ла әҙәбиәт фәненә яңы биттәр өҫтәне. Ә инде уның “Мәғрифәтсе һәм әҙип М.Өмөтбаев” (1991) китабы атаҡлы башҡорт мәғрифәтсеһенең тормошон, донъяға ҡарашын, ғилми, поэтик, публицистик, йәмғиәт эшмәкәрлеген, тәржемә өлкәһендәге эҙләнеүҙәрен бай әҙәби һәм фәнни материалдар, документаль сығанаҡтар ерлегендә тәү башлап монографик планда тулы, төрлө яҡлы һәм эҙмә-эҙлекле яҡтыртҡан етди хеҙмәт булды. Был һәм башҡа монографияларын яҙыу өсөн ғалим илебеҙҙең төрлө ҡалаларындағы тиҫтәләгән архивтарҙа, китапханаларҙың ҡулъяҙмалар һәм һирәк осрай торған китаптар бүлектәрендә бил яҙмай материалдар тупланы, уларҙы системаға һалды, текстологик яҡтан эшкәртте. Әйткәндәй, шул текстологик эшмәкәрлектең бер емеше булып 1984 йылда М.Өмөтбаевтың уның тарафынан төҙөлгән, баш һүҙ һәм комментарийҙар менән тәьмин ителгән “Йәдкәр” исемле әҫәрҙәр һәм фәнни-популяр хеҙмәттәр, 2001 йылда “Шиғырҙар” йыйынтыҡтары донъя

күрҙе. Ғалим-текстолог XIX быуаттың тәүге яртыһында ижад иткән суфый шағир Шәмсетдин Зәкиҙең бығаса ҡулъяҙмаларҙа һаҡланған утыҙлап шиғырын текстологик яҡтан ҡарап, баҫтырып сығарҙы. Ул ике томлыҡ “Балалар әҙәбиәте антологияһы”н (1986, 1987) әҙерләп сығарыуҙа ла әүҙем ҡатнашты.

Ғалимдың мәғариф системаһын үҫтереүгә, дәреслектәр төҙөүгә үҙ өлөшөн индереүе лә хуплауға лайыҡ. Ул уҡытыусы-ғалим Р.Искәндәров менән берлектә “IX класта башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу” (1992) методик ҡулланмаһын яҙҙы, юғары уҡыу йорттары өсөн “История Башкортостана. С древнейших времен до 1917 года” (1991) тигән дәреслектең мәҙәниәткә һәм әҙәбиәткә арналған бүлектәрен яҙыуға тос өлөш индерҙе. Ғалим IX синыф уҡыусылары өсөн “Башҡорт әҙәбиәте” дәреслеге авторҙарының береһе.

Шәкертемдең әүҙем йәмәғәтсе булыуы ла күңелгә ятышлы. “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссия, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, ғафуриҙарҙың Өфөләге “Табын” яҡташтар ойошмаһы рәйесе, уҡыусылар, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн йыл да уҙғарылған “Урал батыр” эпосын башҡарыусылар, “Йыл уҡытыусыһы” конкурстарында жюри ағзаһы буларак, ул күп эштәр алып бара. Тиҫтәнән артыҡ йылдар һуҙымында Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең тәнҡит секцияһын да етәкләне ғалим. Һуңғы йылдарҙа уның тыуған ауылы Сәйетбабаның 300 йыллығын юғары кимәлдә билдәләү, был ауылды республика кимәлендә башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге итеү буйынса инициатива күрһәтеп, янып-дәртләнеп, ошо йүнәлештә төрлө эштәр башҡарыуы, тыуған ауылы һәм мәктәбе хаҡында “Сәйетбаба — изге төйәк” (2004) һәм “Изге лә ул, нурлы ла” (2004) тигән фәнни-публицистик характерҙағы күләмле генә китаптарын баҫтырып сығарыуы ла күптәргә мәғлүм.

Ҡунафин-педагогҡа килгәндә, уның киң ҡарашлы, юғары мәҙәниәтле, үҙенә лә, студенттарға ла талапсан, ғәҙел һәм принципиаль уҡытыусы, оҫта лектор, һәләтле ойоштороусы булыуы хаҡындағы фекерҙәрҙе коллегаларынан да, элекке шәкерттәренән дә, бөгөнгө студенттарынан да күп ишеткән бар. Ғалим-педагог аспирантура һәм докторантура аша юғары квалификациялы ғилми кадрҙар әҙерләү буйынса ла ҙур эш алып бара.

Ошондай әүҙем фәнни, педагогик һәм йәмғиәт эшмәкәрлеге өсөн профессор Ғ.С.Ҡунафин “Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре” тигән маҡтаулы исемгә, төрлө министрлыҡтарҙың почет грамоталарына, СССР Юғары белем буйынса дәүләт комитетының “Хеҙмәттәге юғары уңыштары өсөн” билдәһенә, Рәсәй Фәндәр академияһы Президиумының Дәүләт ғилми стипендияһына, Ж.Кейекбаев исемендәге премияға лайыҡ булды.

Бына шулай үҙ алдына ҙур маҡсаттар ҡуйып, халҡы һәм иле алдында йөҙ ҡыҙартмаҫлыҡ итеп йәшәй, эшләй, ижад итә шәкертем Ғиниәт Ҡунафин. Уға киләсәктә лә зиһен тәрәнлеге, рух юғарылығын юғалтмай ижад итергә, ҙур уңыштарға өлгәшергә яҙһын.